# Методик тәкдимдәр
# (әкиәттәр, хикәйәләр буйынса күргәҙмә – дидактик ҡулланма)

Мәктәпкәсә йәштәге балланың телмәре төрлө эшмәкәрләктә үҫешә: тирә - йүн ысынбарлыҡ менән танышыу, нәфис әҙәбиәт ҡабул итеү, грамотаға өйрәтеү осоронда ғына түгел, шулай уҡ уйын һәм худажестволы эшмәкәрлектә, көндәлек тормошта. Әммә баланың телмәрен үҫтереү махсус ойошторолған эшмәкәрлектәрҙең төп маҡсаты булып тора.

Телмәр үҫтереү эшмәкәрлектәренең нигеҙе булып комплекслы ҡараш һалынған. Тәкдим ителгән методика телмәр үҫешен бөтә яҡлап та үҙ эсенә алған (фонетик, лексик, грамматик, бәйләнешле телмәр) төрлө, бер-береһе менән бәйле маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән. Был методика Е. А. Смирнованың (ғилми етәксеһе О. С. Ушакова) эҙләнеүҙәренең нигеҙендә төҙөлгән. Беҙҙең методиканың төп принцибы булып, төрлө йәш осоронда төрлөсә бирелгән, телмәр маҡсаттарының бәйләнешенән тора.

Эшмәкәрлектең төп өлөшө тематик принципҡа таянып төҙөлә. Эшмәкәрлек тематикаһы бик күп төрлө: йыл миҙгелдәре, хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһы, көнкүреш тормош ваҡиғалары, тәбиғәткә һөйөү һ. б. Телмәр үҫтереү эшмәкәрлегендә балалар башҡа төр эшмәкәрлектә алынған белемдәрен нығыталар, уратып алған тирә - йүн тураһында үҙ фекерҙәрен, кисерештәрен башта ябай лексик һәм грамматик күнегеүҙәр аша белдерһәләр, һуңынан инде бәйләнешле итеп аңлата, һөйләй алалар.

Бәйләнешле телмәрҙе формалаштырғанда баланың телмәр һәм интеллектуаль үҫеше телмәрҙең йөкмәткеле, дөрөҫ төҙөлгән, эҙмә-эҙлекле, ойошторолған булыуы менән асыҡ сағыла. Бер нәмә тураһында бәйләнешле һөйләр өсөн предметты йәки күренеште асыҡ итеп күҙ алдына килтерер кәрәк, анализларға, кәрәкле билдәләрен, сифаттарын һайларға, предмет һәм күренештең үҙ-ара бәйләнешен билдәләргә кәрәк. Унан башҡа, уйлаған фекерҙе еткерер өсөн ябай һәм ҡатмарлы һөйләмдәр төҙөү һәм уларҙы бәйләү өсөн һөйләмдәр генә түгел, башҡа әйтеү, һөйләү сараларын да ҡулланырға кәрәк.

Бәйләнешле телмәрҙе формалаштырғанда телмәр һәм эстетик ҡараштың үҙ-ара бәйләнеше асыҡ сағыла. Тыуған телдең байлығын белеп, уның грамматик төҙөлөшөн ҡулланып бәйләнешле һөйләй белеүе баланың аҡыл кимәлен, эстетик, эмоциональ үҫешен күрһәтә.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәр үҫешендә нәфис әҙәбиәт эшмәкәрлегенең бурыстарын формалаштырғанда эстетик тәрбиә биреү уның айырылмаҫ өлөшө булып тора. Балаларға бәйләнешле монолог һөйләүҙе өйрәткәндә ошондай сараларҙы ҡулланырға мөмкин: сағыштырыу, эпитеттар, синонимдар, антонимдар, метафоралар. Ошо сараларҙы ҡуллана белеү киләсәктә нәфис әҙәрҙәрҙе дөрөҫ ҡабул итергә күнектерә.

Монолог телмәрен үҫтереү мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә төп урынды биләй. Уның уңышлы үҫеше күп шарттарға бәйле

(уратып алған телмәр, тирә-йүн, ғаиләләге аралашыу, баланың индивидуаль үҫеше, әүҙем аң-белемгә ынтылышы), улар маҡсатҡа ярашлы телмәр тәрбиәләү барышында иҫәпкә алына.

Бәйләнешле монологик телмәрҙе ҡуллана белеүе - мәктәпкәсә йәштәге баланың телмәр тәрбиәләү буйынса юғары күрһәткесе. Ул телмәрҙең өндәрҙе үҙләштереүҙе, һүҙлек байлығын, телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн үҙ эсенә ала һәм уның бөтә яҡтан үҫеше менән тығыҙ бәйләнгән (лексик, грамматик, фонетик). Монологик телмәрҙе һәр яҡлап үҫтерергә кәрәк, сөнки лексика, грамматика, фонетика бәйләнешле телмәр үҫтереүгә ыңғай йоғонто яһай.

Бәйләнешле телмәрҙе формалаштырыу тасуирлау, уҡығанды һөйләтеү һәм хәл-ваҡиғаны һөйләп аңлатыуҙы үҙ эсенә ала.

Балаларға әҫәрҙе тулыһынса һөйләргә өйрәткәндә тексттың структураһы тураһында һөйләп аңлатырға кәрәк (тексттың башы, уртаһы, аҙағы), шулай уҡ һөйләмдәрҙең үҙ-ара бәйләнеше һәм структураһы тураһында иҫкә төшөрөргә мөмкин.

Күргәҙмәлек сараларының кәрәклеген күп педагогтар беләләр, әммә был сара һәр ваҡыт маҡсатҡа ярашлы ҡулланылмай. Сериялы һүрәттәр буйынса хикәйә төҙөп һөйләргә өйрәтеү – мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүҙең бер бурысы булып тора. Ул сериялы сюжетлы һүрәттәрҙең йөкмәткеһен дөрөҫ ҡабул итеүен үҫтерә һәм төрлө типтағы һөйләмдәр төҙөүҙе, төрлө ысул менән һөйләмдәрҙең бәйләнешен күнектерә. Хикәйә төҙөүҙең был төрө логик фекерләүҙең, күҙаллауҙың, ижади һәләттең эстетик һәм әхлаҡи яҡтан үҫеүенә булышлыҡ итә.

Тәҡдим ителгән сериялы һүрәттәрҙе телмәрендә етешһеҙлеге булған бала менән педагогтар телмәр үҫтереү эшмәкәрлегендә, ирекле эшмәкәрлектә, шулай уҡ индивидуаль шөғөлләнгәндә ҡуллана ала.

Бәйләнешле телмәр үҫтереү эше баланың һүҙлек байлығын үҫтереү, һүҙҙең мәғәнәһен аңлатыу, телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн формалаштырыу һәм өндәр мәҙәниәтен тәрбиәләү эше менән бергә алып барыла.

Һөйләргә өйрәтеү эшмәкәрлеге һәр дәрестә үҙ эсенә төрлө лексика (синонимдар, антонимдар, сағыштырыуҙар һайлау), грамматика (һүҙҙәрҙе үҙгәртеү, һүҙбәйләнештәр төҙөү һәм төрлө типтағы һөйләмдәр), фонетика ( телмәрҙең һөйләшеү темпын һәм тауыш көсөн үҙгәртеү, бирелгән ритмик фразаға рифмалар һайлау) ала. Ошондай күнегеҙәр балаларға бәйләнешле һөйләмдәрҙе логик һәм ваҡыт эҙмә-эҙлелегендә төҙөргә, тексттың өлөштөрен һәм һөйләмдәрҙең төрлө саралар аша үҙ ара бәйләнешен күрһәтергә ярҙам итә.

Сериялы сюжетлы һүрәттәр буйынса эшләгәндә балала хикәйәнең композицияһы тураһында күҙ алдына килтереүҙе формалаштырырға һәм нығытырға (башы, кульминацияһы, аҙағы), уға теүәл исем уйлауҙы күнектереү, дөрөҫ итеп һүрәттәрҙе теҙеү, һөйләгәндә төрлө синтаксик конструкциялар ҡулланыуҙы индереү. Сюжетлы һүрәттәр нигеҙендә балала һүҙҙәрҙе ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙә бәйләй белеү күнекмәһе нығытыла, шулай уҡ хикәйәнең йөкмәткеһен һөйләгәндә уның структураһын һаҡларға кәрәк. Персонаждарҙы характерлағанда уларҙың хәрәкәтен, хәлен

билдәләгәндә синонимдар ҡулланыу баланың һүҙлеген байыта.

Шулай итеп, сериялы сюжетлы һүрәттәр буйынса һөйләү телмәр үҫтереү бурыстарын үтәүҙе бөтә яҡлап үҙ эсенә ала.

Сериялы һүрәттәр аша һөйләү ваҡытында текстың йөкмәткеһен бергәләп (төркөмсә менән) төҙөйҙәр. Шул уҡ ваҡытта балалар кем беренсе сюжет буйынса (башы), кем икенсе сюжет буйынса (уртаһы), ә кем һуңғы сюжетлы һүрәт буйынса (аҙағы) һөйләйәсәген үҙҙәре билдәләй. Был алым бер яҡтан бер- береһе менән кәңәшләшергә өйрәтһә, икенсе яҡтан хикәйәнең композицияһы тураһында күҙаллауын нығыта.

*Сюжетлы һүрәттәрҙе төрлөсә тәкдим итергә мөмкин*: тәүге сюжетлы һүрәт кенә асыҡ, ҡалған өс йәки дүрт ябыҡ, әммә һәр сюжетты дүрт бала һөйләй (һәр бала үҙе һайлаған сюжетлы картина янына тора; хикәйәнең башы билдәле, ә дауамын һәм аҙағын балалар үҙҙәре уйлап һөйләй). Бынан һуң эҙмә-эҙлекле икенсе сюжетле картина асыла (шулай уҡ киләһе дүрт бала һөйләй, улар инде сюжет барышын күрә, әммә аҙағын белмәйҙәр. Шул уҡ структура буйынса өсөнсө сюжетлы картина асыла (был юлы ла “яңы” команда йыйыла). Дүртенсе сюжеткә еткәс бөтә катриналар ҙа асыла, һәм яңы хикәйә (әкиәт) төҙөлә. Киләһе серияла тәүге өс картинаны ябып, дүртенсеһен генә асыҡ ҡалдырырға мөмкин. Был юлы балалар сюжеттың нисек бөткәнен күрәләр, һуңынан ғына яйлап тәүге сюжеттар асыла. Тәүге һәм һуңғы сюжет асыҡ булыуы ла ихтимал, был юлы инде балалар сюжеттың нисек башланыуы һәм бөтөүен беләләр. Балалар был осраҡта беренсе һәм һуңғы сюжет араһында нимә булғанын һөйләйҙәр. Һәр хикәйә (әкиәт) буйынса (асыҡ һәм ябыҡ сюжеттар) һөйләгән өҙөккә баллаарға исем ҡушырға тәҡдим ителә.

Сюжеттарға бүлеп һөйләү балаларҙа хикәйәнең (әкиәттең) композицияһын күҙаллау мөмкинселеге бирә. Шул куҡ ваҡытта балаларға бер – береһе менән утраҡ тел табып аралашыуға, әхләки яҡтан үҫешкә лә ыңғай яҡтан этәргес була.

Бер - бер артлы бүлешеп һөйләү “команда” ағзаһына үҙенең һәм йәштәштәренең мөмкинселетәрен анализлай алыуға ла мөмкинселек бирә. Сюжет төҙөп һөйләү шулай уҡ өлөштәрҙең мәғәнәһен аңлау өсөн төрлө саралар ҡулланыуҙы формалаштыра, күргәҙмә- образлы һәм логик фекерләү ҡеүәһен үҫтерә. Баланың һөйләмдәрҙе төҙөүенә, ҡыҙыҡтырып һөйләй алыуына, ижадилығына ҡарап, тыуған телдең нескәлектәрен үҙләштереү, телмәр үҫешенең кимәлен билдәләп була. Шул уҡ ваҡытта эмоциональ, зауыҡлы, аң – зиһен үҫешен билдәләүҙә лә бик ҙур роль уйнай.